# Сал Ирәндек улы - Абдулхаҡ



# Абдулхаҡ Игебаев

- Абдулхаҡ Хажмөхәмәт улы Игебаев 1930 йылдың 2 июлендә Баймаҡ районы Күсей ауылында тыуған. 1946 йылда Темәс педучилищеһын тамамлай. 1946-1950 йылдарҙа Өфө пединститутында уҡый. “Йәшлек йыры” тигән беренсе шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда донъя күрә. Уның  утыҙҙан ашыу шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡҡан.

- Абдулхаҡ Игебаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев Дәүләт премияһы лауреаты.

**Мин – зәңгәр умырзая.**

Һаумы, урман, һаумы, туғай,
Һаумы, буй етмәҫ ҡая,
Ҡар аҫтынан шытып сығып,
Яҙ сәләмен алып килгән
Мин – зәңгәр умырзая.


Bankoboev.Ru

Үҙем нескә генә сәскә,
Әммә йөрәгем сая,
Һалҡын боҙ ҡатламын тишеп,
Сал Уралға тамыр йәйгән
Мин – нәфис  умырзая!

# 2015 йылдың 2 июлендә яҡташыбыҙ Абдулхаҡ Игебаевҡа 85 йәш тулды.

